ISBN 978-5-91608-181-7 С. 50-53

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.009

УДК 811.512.141+373.5

**А. Г. Байышева**

*МБОУ гимназия села Месягутово муниципального района Дуванский район РБ*
*улица Успенская, 22, село Месягутово, Дуванский район, 452530,Россия*
*E-mail: Baisheva-79@mail.ru*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН СИНГАПУР МЕТОДИКАҺЫ БУЙЫНСА УҠЫТЫУ

В статье автором описывается одна из методик в преподавании языка, наиболее эффективная в обучении башкирскому языку как государственному. Предложенная методика способствует формированию коммуникативной компетентности учащихся.

*Ключевые слова:* башкирский язык, инновационные технологии, сингапурская методика.

Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптары буйынса, уҡыу процесында һәр дәрес һөҙөмтәле булырға тейеш, уҡыусыларҙы социаль, эмоциональ яҡтан да, танып белеү һәләтен дә үҫтерергә бурыслы. Уҡытыусы уҡыусыларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәренә лә иғтибар итеп, һәр уҡыусы үҙен комфортлы тойоп, теләп белем алыуын тәьмин итергә тейеш [Баһауетдинова, Йәғәфәрова, 2009, 10]. Тик шуларҙың барыһын да ҡәнәғәтләндерерҙәй алымдар бармы икән?

Хәҙерге көндә донъя йөҙөндә Сингапур белем биреү системаһы иң юғары кимәлдә тороусыларҙан береһе. Шуға ла был эффектлы тип һаналған система беҙҙә ҡыҙыҡһындырҙы. Иң тәүҙә илебеҙҙәге белем алыуҙан нимәһе менән айырыла икәнен ҡарап үтәйек.

Был система буйынса, башланғыс синыфтар 6-сы класҡа тиклем дауам итә, унан һуң уҡыусылар имтихан бирәләр. Артабан, уларҙың белем кимәленә ҡарап, уҡытыу ике программа менән алып барыла: интеграцияланған һәм профессиональ.

Сингапур белем биреү методикаһы командалап эшләүгә нигеҙләнгән. Класс – *билдинг,* команда – *тимбилдинг* тип атала. Был технологияла һәр уҡыусы ишетелергә тейеш, шым ғына, бер һүҙ өндәшмәй ултырған уҡыусы юҡ, бөтә класс эш менән мәшғүл. Балаларға уйларға, үҙ фекерен әйтә белергә, һәр ваҡыт актив булырға мөмкинлек бирер өсөн тренинг формаһында күнекмәләр бирелә. Парталар ҡояш нурҙары рәүешендә теҙелә, бер уҡыусы ла уҡытыусыға арҡаһы менән ултырмай.



Сингапур методикаһы буйынса, уҡытыу процесының һәр элементы номер менән башҡарыла: парталар, хатта балаларҙың да билдәле бер номерҙары була. Һәр партала номерлы бирка тора, ҡағыҙ бите ята, унда ултырған уҡыусыларҙың номеры күрһәтелә: 1, 2, 3, 4.

Балалар дәрес буйы ниндәйҙер номер аҫтында эшләйҙәр. Мәҫәлән, “1” һаны янында ултырған уҡыусы был дәрестә “1-се  номер” булып эшләргә күнегергә тейеш.




Сингапур системаһы модулдәре менән эшләй башлағанда, беҙҙең  уҡытыу системаһына хас булмаған “партнер” менән эшләүҙең нимә икәнлеген төшөнөп алырға кәрәк. Ҡаршыла ултырған кеше “ҡаршы партнер”, эргәлә ултырыусы “иңбаш партнеры” була. Традицион уҡытыу системаһында бер нисә бала ғына эшләһә, бында бөтәһе лә эш менән мәшғүл: индивидуаль һәм төркөмдәрҙә эш бергә алып барыла.

Был системалағы тағы ла бер ҡыҙыҡлы яҡҡа иғтибарҙы йүнәлтәһе килә: бөтә белем биреү структуралары командала эшләргә, төркөм ағзаларын ишетергә, тыңларға өйрәтә.

Методикала йәмғеһе 250 төр структура ҡаралған. Башҡорт теле дәрестәрендә уларҙың бөтәһен дә  ҡулланып булмай, әлбиттә, ҡайһы бер структуралары ғына алына. Түбәндә уларҙың иң эффектлы тип табылған бер нисәүһен ҡарап үтелә.

**I. Тимбилдинг структураһы.**

1. Һәр уҡыусының алдында аҡ ҡағыҙ бите ята. Уҡытыусының командаһы буйынса бөтәһе лә ҡағыҙҙың һул яҡ мөйөшөнә исемлек рәүешендә номерлап, өйҙә башҡарған эштәрен бағанаға теҙеп яҙа. Мәҫәлән, 1) һауыт-һаба йыуҙым, 2) иҙән һеперҙем һ.б.

2. Ҡағыҙ битен, самолет эшләгәндәге кеүек, өсмөйшкә, ә ҡалған аҫтағы өлөшөн тура мөйөшкә бөкләйҙәр.

3. Номерҙарына ярашлы һәр бер бала эшләгән эштәрен һанап сыға.

4. Әгәр шул эште башҡалар ҙа эшләһә, ҡул күтәрәләр. Уртаға был эште класта нисә кеше башҡарғанын яҙалар.

5. Аҫтағы өлөшкә класта нисә кеше иҙән һепергән, нисә кеше һауыт-һаба йыуған һәм башҡалар тураһында һөйләм яҙалар.

6. Төркөмдә һәр береһе ҡысҡырып һөйләмдәрен уҡый, тап килеүҙәрен тикшерәләр.

Тимбилдинг структураһы барыһын да бер-береһен тыңларға, мәғлүмәтте ишетергә, аңларға, уны һөйләм итеп яҙа белергә өйрәтә. Шулай уҡ хәтерләү, мәғлүмәтте графикала

дөрөҫ урынлаштырыу, әйтеп биреү һәм кинестетик (ҡағыҙ бөкләү) күнекмәләрен үҫтерергә ярҙам итә.

**II. Ралли Робин структураһы.**

Һәр береһенең алдында ҡағыҙ бите ята. Мәҫәлән, уҡыусыларға “Яратҡан миҙгелем” темаһы буйынса эш тәҡдим ителә.

1. Һәр кем ҡағыҙ битендә яратҡан миҙгелен аңлата (2 минут бирелә).
2. Балалар яҙғандарын уҡып сығалар.
3. “Иңбаш партнеры”на һөйләргә йәки уҡырға тәҡдим ителә.
4. Тыңлаған бала: “Рәхмәт, миңә оҡшаны”, – тип, яуап рәүешендә үҙе партнерына һөйләй.
5. “Ҡаршы партнер”ына һөйләү.
6. Фронталь эш. Уҡытыусы һорауҙар бирә. Мәҫәлән: «Антон, ҡаршы партнерың ниндәй миҙгелде ярата?»

Шулай итеп, Ралли Робин структураһы балаларҙың барыһын да эшкә йәлеп итә, бөтәһенә лә тигеҙ ҡатнашырға мөмкинлек бирә, башҡортса һөйләшергә, кеше менән практик аралашырға өйрәтеп, коммуникатив компетентлыҡты үҫтерә, класта дуҫтарса атмосфера булдыра.

**III. Микспейш структураһы.**

Был күнегеүҙе дәрес уртаһында балаларҙы әүҙемләштереү маҡсатында ла үткәрергә була.

Таҡтала ⟺ ҡуян бара

⇕ ⇕

тәмле ⟺ ашай

тип яҙылған.

1. Башҡортса көй яңғырай. Балалар класс буйлап йөрөйҙәр, горизонталь буйынса матур ғына һөйләм уйларға ҡушыла.
2. Көй туҡтауға, эргәһендә ҡалған кеше менән парлашалар, парҙа кем оҙонораҡ, шул һөйләм әйтә.
3. Көй ҡуйыла, атлап йөрөйҙәр, вертикаль буйынса һөйләм уйлап йөрөйҙәр.
4. Көй туҡтауға парлашып, парҙа кем ҡыҫҡараҡ, шул һөйләмен партнерына әйтә.

Был структура балаларҙың барыһын да хәрәкәтләнергә, уйларға, аралашырға мәжбүр итә.

Беҙҙең фекеребеҙсә, әгәр ҙә сингапур методикаһы башҡорт телен уҡытыуҙа әүҙем ҡулланылһа, коммуникатив компетенлыҡ үҫтереләсәк, йәғни балалар айырым һүҙҙәрҙе генә иҫтә ҡалдырмай, һөйләмдәр менән аралашырға өйрәнәсәк. Алған белем “буш багаж” булып ҡалмаясаҡ, ә төрлө аралашыу ситуацияларында кәрәкле ҡоралға әйләнәсәк.

Сингапур методикаһының үрҙә тәҡдим ителгән алымдары башҡаларҙы тыңлай, аңлай белеү, улар менән диалог төҙөү, әңгәмәсенең фекерен иҫәпкә алыу, мәғлүмәтте ҡабул итеү һәм тапшырыу, хеҙмәттәшлек итә белеү оҫталығын үҙ эсенә ала.

Дөйөм алғанда, сингапур методикаһының элементтарын ҡулланыуҙың отошло яҡтары шунда:

- предметҡа булған ҡыҙыҡһыныуҙы үҫтерергә булышлыҡ итә;
- белем биреү процесын тиҙләтә;
- материалды үҙләштереүҙең сифатын яҡшырта;
- индивидуалләштереүҙе һәм дифференциациялауҙы тәьмин итә;
- уҡытыусы менән уҡыусы хеҙмәттәшлегенә булышлыҡ итә;
- коммуникатив компетентлыҡты формалаштыра.

Ошолар нигеҙендә башҡорт телен уҡытыу эшендә сингапур методикаһы уңышлы һәм һөҙөмтәле булыр, тип иҫәпләйбеҙ.

**Әҙәбиәт**

Баһауетдинова М. И., Йәғәфәрова Г. Н. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә яңы технологиялар ҡулланыу. – Өфө: Педкнига, 2008. – 204 бит.
Баһауетдинова М. И., Йәғәфәрова Г. Н. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу. – Өфө: Китап, 2009. – 176 бит.
Электрон ресурс: https://eduinspector.ru/2018/03/19/singapurskaya-metodika-obucheniya-sovetsko-rossijskij-sled/
Электрон ресурс: http://www.titul.ru/uploads/journal/52/journal_48_07-12.pdf

**A. G. Baisheva**

*Municipal Budgetary General Educational Institution*
*Gymnasium the village Mesyagutovo Duvan district*
*Uspenskaya street, 22, village Mesyagutovo, Duvanskiy district, 452530,Russia*
*E-mail: Baisheva-79@mail.ru*

## TEACHING THE BASHKIR LANGUAGE ACCORDING TO THE SINGAPORE SYSTEM

In the article the author describes one of the methods in language teaching, the most effective in teaching the Bashkir language as the state language. The proposed technique contributes to the formation of communicative competence of students.

*Keywords*: Bashkir language, innovative technologies, Singapor technique.

**References**

Bahauetdinova M. I., Yagafarova G. N. Use of new technologies in teaching the Bashkir language and literature. Ufa: Pedkniga, 2008. 204 p.
Bahauetdinova M. I., Yagafarova G. N. Teaching Bashkir language and literature in a modern way. Ufa: Kitap, 2009. 176 p.
https://eduinspector.ru/2018/03/19/singapurskaya-metodika-obucheniya-sovetsko-rossijskij-sled/
http://www.titul.ru/uploads/journal/52/journal_48_07-12.pdf